

*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,*
*«Ватандаш» журналының*
*беренсе баш мөхәррире,*
*БР Фәндәр академияһы академигы,*
*Салауат Юлаев исемендәге*
*дәүләт премияһы лауреаты*

# ЖУРНАЛДЫҢ ТӨП ЙӨНӘЛЕШЕ ҺӘМ ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ

Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының “Ватандаш” исемле журнал сығарыу тураһында 1996 йылдың 26 ғинуарында махсус ҡарары булды. Журнал редакцияһы февралдә үҙ эшен башланы. Һәр башланғыс кеүек, баш мөхәррир, уның хеҙмәткәрҙәре алдында бина табыу, эште нисек ойоштороп ебәреү, авторҙар коллективы туплау, иң мөһиме, журналдың төп йүнәлешен, статусын асыҡлау ише ауыр мәсьәләләр торҙо.

“Ватандаш” журналы Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының ҡарары буйынса нәшер ителә. Уның ойоштороусылары — Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты менән Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты. Былар журналдың төп йүнәлешен һәм статусын аныҡ билдәләште лә.

“Ватандаш” — энциклопедик характерҙағы ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис журнал. Ул, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының һәм республика йәмәғәтселегенең талаптарына, ихтыяждарына ярашлы рәүештә, бөтөн башҡорт донъяһын һәр йәһәттән киңерәк һәм тулыраҡ яҡтыртыуҙы төп маҡсат итте. Уның биттәрендә халҡыбыҙҙың тарихын, этнографияһын, мәҙәниәтен, мәғрифәтен, фәнен, сәнғәтен, әҙәбиәтен, фольклорын, хәҙерге ҡаҙаныштарын, милләт булараҡ үҫеү юлдарын, сәйәси, иҡтисади, социаль хәлен, халыҡ тормошона һәм рухи донъяһына бәйле мөһим мәсьәләрҙе яҡтыртыу, киң мәғлүмәттәр биреү бурыс итеп ҡуйылды. Башҡортостан Республикаһының суверенлығы, хәҙерге торошо һәм киләсәге мәсьәләләре үҙәктә торҙо. Күрше өлкәләрҙә, Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең тормошо менән таныштырыуға ла ҙур әһәмиәт бирҙек. Шул уҡ ваҡытта рухи мираҫыбыҙ, тарихи шәхестәребеҙ, дәүләт, йәмәғәт, фән, мәҙәниәт, сәнғәт, төрлө һөнәр эйәләренең тормошо һәм дәүләт күләмендәге эшмәкәрлеге тейешле күләмдә урын алды.



05-2001.p65 37 27.07.01, 11:42

Шулай итеп журналдың түбәндәге төп бүлектәре йәки рубрикалары уның структураһын һәм күҙгәләгелә йөҙөн билдәләне: рәсми бүлек (мөһим документтар, Президент, хөкүмәт, хакимиәт башлыҡтары сығышы, интервьюлар һ.б); публицистика (хәҙерге замандың үҙәк проблемалары); тарих; этнография; фольклор; әҙәбиәт; сәнғәт; мәҙәниәт; фән; философия; дин; рухи мираҫ; Башҡортостан, башҡорттар тураһында Рәсәй, сит ил матбуғаты, ғалимдары, яҙыусылары, әһәмиәтле баҫмалар, ҡулъяҙмалар; яңылыҡтар. Эш барышында журналдың рубрикалары төрләнә, яңыра, йөкмәткеһе йылдан-йыл байыға барҙы. Артабан республикабыҙҙың районларына, ҡалаларына, халыҡтарына, ҙур вуздарына, Фәндәр академияһына, театрҙарына арналған бүлектәр журналыбыҙға тағы ла бер йәм өҫтәп ебәрҙе. Республика, башҡорт халҡы, шәхестәре, рухи донъяһы тураһындағы фәнни-популяр мәҡәләләрҙе, бай мәғлүмәттәрҙе журнал уҡыусыларыбыҙ яратып ҡабул итте; ғилми, ижади дискуссиялар, төрлө мәсьәләләр буйынса киң фекер алышыуҙар ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә "Ватандаш" журналы республикабыҙҙа ғына түгел, Рәсәй Федерацияһында, башҡорттар диаспораһы йәшәгән Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһендә лә абруйлы, сит ил ғалимдарына ла билдәле баҫмаға әүерелде. Һәр йәһәттән уның кимәле, статусы күтәрелде, биҙәлеш сифаты яҡшырҙы, беренсе категориялы матбуғат органы хоҡуғына эйә булды. Журнал хеҙмәткәрҙәренә тейешле эш шарттары тыуҙырылды, редакция эше тотошлай компьютерлаштырылды. Тексты йыйыу һәм версткалау редакцияның үҙендә башҡарыла. Типографияға әҙер верстка дискетаға яҙып тапшырыла. Былар өсөн беҙ туранан-тура хәстәрлек күргән Президентыбыҙ М.Ғ.Рәхимовҡа, Премьер-министрыбыҙ Р.И.Байдәүләтовҡа рәхмәтлебеҙ. Журнал тирәһенә һәләтле журналистар, ғалимдар, яҙыусылар, төрлө һөнәр эйәләренән торған авторҙар коллективы тупланды.

Республикабыҙҙа сыҡҡан әҙәби, иҡтисади, фәнни, спорт, сәнғәт, йәштәр, ҡатын-ҡыҙҙар махсус журналдары менән сағыштырғанда, "Ватандаш" журналы киң профилдәге фәнни-популяр ваҡытлы баҫма булыуы менән айырылып тора. Ул республикабыҙ тормошон, ҡаҙаныштарын, башҡорт халҡының рухи донъяһын, яҙмышын төрлө яҡлап сағылдырыуға саҡырылған, халыҡ-ара кимәлдә республикабыҙҙың визит карточкаһы булырҙай орган. Быға уның бөтә йәһәттән яуап биреүе шарт. Бының өсөн һәр мәҡәләнең, материалдың ғилми-интеллектуаль юғарылығы, нигеҙлелеге һәм фекергә тығыҙлығы, мәғлүмәттәргә байлығы, популяр стилле, шыма телле булыуы талап ителә. Редакторлау эше профессиональ кимәлдә булырға тейеш. Киләсәк быуындар, ғалимдар, төрлө белгестәр "Ватандаш" журналының XX быуат аҙағындағы һәм XXI быуат башындағы һандарына ҡарап, уға йөҙ-ике йөҙ йылдарҙан, быуаттарҙан һуң мөрәжәғәт итеп тә республикабыҙҙың үткән тарихын, ижтимағи-сәйәси, иҡтисади, мәҙәни, рухи йөҙөн, фәнни, интеллектуаль кимәлен күрергә, мөһим сығанаҡ итеп файҙаланырға тейеш. Быларға иһә баш мөхәррирҙең, урынбаҫарының, бүлек мөхәррирҙәренең ҙур эрудицияһы, интеллекты, юғары культураһы, журналистик, редакторлау маһирлығы менән генә өлгәшергә мөмкин. Журналда материалдарҙың өс телдә (башҡортса, русса, инглизсә) биреләүе, халыҡ-ара статусҡа дәғүә ителеүе лә шундай юғарыраҡ баҫҡыстар ҡуя.

Журнал редакцияһы коллективына шул йүнәлештә уңыштар, яңы бейеклектәр, изге теләктәр күндерәм.



05-2001.p65 38 27.07.01, 11:42